## ДЕКАБРЬ

## Күҙәтеү № 1

**Миҙгелдәр алышыуын күҙәтеү.**

**Маҡсат:** - ҡыш миҙгеленә хас тәбиғәттәге үҙгәрештәрҙе аңларға булышлыҡ итеү (көндәр ҡыҫҡара, төндәр оҙоная), ҡыштың үҙенсәлектәрен күрергә һәм аңларға булышлыҡ итеү.

**Эш барышы:**

Ҡырҙар, тауҙар, урмандар ҙа

Декабрьҙә аҡ ҡына

Елкалар йым - йым килергә

Ҡалды инде саҡ ҡына. (Ф.Туғыҙбаева)

Декабрь - ҡыштың беренсе айы. Ҡояш бик һирәк кенә сыға ла тиҙ генә байый.көндәр бик ҡыҫҡа.ә төндәр оҙон. Декабрь ниндәй айҙан һуң килә? Кешеләр тормошонда, хайуандар, ҡоштар, бөжәктәрҙең көнкүрешендә ниндәй үҙгәрештәр булды? Беҙҙең майҙансыҡта ҡыштың билдәләрен табығыҙ.

**Хеҙмәт:** - ағас, ҡыуаҡ төптәрен ҡар менән күмеп сығыу.

**Хәрәкәтле уйын;** ”Хәйләкәр төлкө” - етеҙлектә, иғтибарлылыҡта күнектереү, ихтияр көсө тәрбиәләү.

**Хәрәкәтле уйын:** ”Кем мәргән!” - тура сәпкә ташлауҙа күнектереү.

**Күҙәтеү № 2**

**Йәшелсә баҡсаһын күҙәтеү.**

**Маҡсат:** ҡыш миҙгелендә баҡсалағы үҙгәрештәртәр менән таныштырыу, тәжрибә - тикшереү эшенә ҡыҙыҡһыныу уятыу.

**Эш барышы;**

Ерҙә үҫә витаминдар,

Витаминдар теп тере,

Уларҙы үҙем үҫтерәм ,

Тәрбиәләйем үҙем.

Ҡыяҡтары йәм - йәшелдә,

Һап - һары уның башы

Ашнаҡсыны илатһала,

Иж, тәмләй ул һәр ашты (һуған).

- Баҡсала ҡыш килеү менән нимә үҙгәрҙе? (ҡар ҡапланы)

- Ҡар үҫемлектәр өсөн нимә булып тора? (юрған кеүек ерҙе ҡаплай.үҫемлектәрҙе һаҡлай).

- Ҡарҙың күплеге яҡшымы әллә зыянмы? (яҡшы.сөнки ерҙең дымы күп)

**Тәжрибә - тикшереү эше** - баҡсаның төрлө ерендә ҡарҙың ҡалынлығын үлсәп тикшереү.

**Хәрәкәтле уйын:**”Һәпәләк” – тирә - йүндә дөрөҫ йүнәлеш алыуҙа күнектереү.

**Хәрәкәтле уйын:**”Өкөләр” - тәрбиәсенең командаһын тыңларға, иғтибарлылыҡта күнектереү.

**Хеҙмәт**: ҡарҙан төрлө һындар эшләргә булышлыҡ итеү.

**Күҙәтеү № 3**

**Ҡыҙылтүштәрҙе күҙәтеү.**

**Маҡсат;** ҡышлаусы ҡоштар тураһында белмдәрен барлау,улар тураһында хәстәрлек күреү – кешеләрҙең экологик мөнәсәбәте тураһында аңлатыу

эше алып барыу.ҡыҙылтүштәрҙең ҡылыҡтары менән таныштырыу.

**Эш барышы:**

Баҡсалағы ағастарға

Теҙелгән ҡыҙылтүштәр.

Муйындағы мәрйендәре.

Гүйә ҡыҙыл тәлгәштәр.

Ултыралар сутылдашып

Миләштәргә күмелеп.

Алһыу - ҡыҙыл емештәргә

Үҫкән һымаҡ үрелеп. (З.Исламова).

**Тәрбиәсенең һорауҙары:**

- ҡыҙылтүштәр нимә ашайҙар? Ҡайҙа ҡышлайҙар? Кешеләр нисек улар тураһында хәстәрлек күрәләр? Ни өсөн ҡыҙылтүштәр беҙгә ҡышларға килгәндәр?

**Һынамыш** - Тәҙрә төбөнә килеп ҡыҙылтүш сирҡылдаһа,көндәр йылына.

**Хеҙмәт;** майҙансыҡҡа осоп килгән ҡоштарҙы ашатыу

**Хәрәкәтле уйын;** ”Өйһөҙ ҡуян”, “Баҫтырыш” - етеҙ, төкөшмәй йүгереүҙә күнектереү. Сыҙамлылыҡ тәрбиәләү.

**Уйын-күнегеү;** “Сәпкә ташла” - ҡар йомарламдарын сәпкә ташлау, иғтибарлылыҡта, төҙ ташлауҙа күнектереү.

**Күҙәтеү №4**

**Боҙ һәм ҡарҙы күҙәтеү**.

**Маҡса:** - Йәнһеҙ тәбиғәт күренештәрен аңларға булышлыҡ итеү, һыуҙың ҡаты хәле - ҡар. боҙ икәнен аңлатыу

**Эш барышы;**

- Шәкәр тиһәң,шәкәр түгел.

Һөт тә түгел - үҙе аҡ.

Мамыҡ тиһәң. мамыҡ түгел.

Йә, был нимә? Уйлап тап! (ҡар)

- Утта янмай, һыуҙа батмай. (боҙ)

Тәрбиәсе тәжрибә үткәрә - бер стаканға боҙ, ә икенсеһенә ҡар тултыра.

-Ҡар, боҙ ниндәй төҫтә? Тотоп ҡарап ҡарҙың,боҙҙоң үҙенсәлектәрен

әйтегеҙ. Ҡар менән боҙҙо йылы урынға ҡуйып күҙәтеүҙе дауам итәбеҙ.

**Хеҙмәт:** - майҙансыҡты ҡарҙан таҙартыуға булышлыҡ итеү.

**Хәрәкәтле уйын:** ”Янғын һүндереүселәр” - төрлө ҡаршылыҡтар аша

йүгереп, шыуышып үтергә күнектереү.

**Хәрәкәтле уйын:** ”Ҡапҡалар аша” - ихтияр көсө, үҙенә ныҡлы ышаныс тойғоһо тәрбиәләү.

**Уйын-күнегеү** - ҡаршылыҡтар аша тубыҡтарҙы өҫкә бөгөп атлап үтеү.

**Күҙәтеү № 5**

**Күгәрсендәрҙе күҙәтеү.**

**Маҡсат:** Ҡоштар тураһындағы белемдәрен нығытыу, уларға ҡарата ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.

**Эш барышы:**

Күк күгәрсендәр ем сүпләй,

Майҙанда гөрөлдәшеп

Бер-береһен һыйлайҙар

Үҙҙәренсә һөйләшеп. (Г.Юнысова)

**Йомаҡ: -** Гөлдөр - гөлдөр гөлдөрсөк, Гөлкәй ҡыҙыл ситекле (күгәрсен).

- Яҡын тирәлә иң күп күргән ҡошоғоҙҙо әйтегеҙ әле.

- Күгәрсендәр нимә менән туҡланалар? Уларҙы кем ашата? Нимә суҡып ашарға яраталар? Күгәрсендәр ҡышлаусы әллә китер ҡоштармы?

Уларҙың йәшәгән ере нисек атала?

**Хеҙмәт: -** ҡурсаҡтар өсөн тау эшләү - күмәкләп эшләгән хеҙмәттән

кинәнес тойғоһо тәрбиәләү.

**Хәрәкәтле уйын:** ”Сәп” – иҫәп - хисап һәләтен, мәргәнлекте үҫтереү.

**Хәрәкәтле уйын:** ”Йәшенмәк” - иғтибарлылыкта, сыҙамлыкта, етеҙлектә күнектереү.

**Күҙәтеү № 6**

**Автокранды күҙәтеү.**

**Маҡсат** - балаларҙы йөк транспорты менән таныштырыуҙы дауам итеү, йөк транспортының кеше хеҙмәтендәге әһәмиәтен аңларға булышлыҡ итеү.

**Эш барышы:**

- автокранды ҡайҙа ҡулланалар?(төҙөлөштә,юлдарҙы төҙөгәндә);
- ул ниндәй эш башҡара?(ауыр йөк күтәрә);
- кем ул машинала эшләй?(кран йөрөтөүсе);
- һеҙ нисек уйлайһығыҙ,был һөнәр кәрәклеме ,әллә юҡмы?;
- һеҙгә был һөнәр оҡшаймы?;
- Шамонино ауылында автокран ниндәй эштәр башҡара икән? (өйҙәр төҙөй).

**Хеҙмәт:** майҙансыҡтағы ҡарҙы бер урынға өйөү.Күкрәктәрҙе эштән һуң үҙ урындарына ҡуйыу.

**Хәрәкәтле уйын: - "**Алтынтау батшалығы" - тауға етеҙ менеүҙә күнектереү, батырлыҡ, саялыҡ кеүек тойғолар тәрбиәләү.

**Хәрәкәтле уйын: - "**Беҙ, беҙ, беҙ инек" - ҡағиҙәләрен боҙмай уйнарға тырышыу, иғтибарлылыҡ тәрбиәләү.

**Уйын – күнегеү -** "түңгәктән түңгәккә" - урындан оҙонлоҡҡа һикереүҙә күнектереү, үҙ көсөңә ышаныс тәрбиәләү.

**Күҙәтеү № 7**

**Ҡышҡы һыуыҡты күҙәтеү.**

**Маҡсат:**ҡыш көнөнә хас тәбиғәт күренештәре менән

таныштырыуҙы дауам итеү, тәбиғәттең һәр көнөндә ыңғай

күренеш күрергә һәм аңларға булышлыҡ итеү.

**Эш барышы:** ишектән инә.түргә уҙа.

Ҡулһыҙ һүрәт төшөрә.

Тешһеҙ-тешләй. (һыуыҡ).

Аяғы юҡ.ҡулы юҡ

Үҙе һүрәт төшөрә (һыуыҡ).

Тәҙрә ҡаға Һыуыҡ бабай.

Бармаҡтары туҡ та туҡ.

Таңға табан тынысланып,

Яһаған боҙҙан каток.

Өшөтһә лә Һыуыҡ бабай,

Без унан һис ҡурҡмайбыҙ

рәхмәт әйтеп бүләгенә

янып-бешеп уйнайбыҙ. (З.Исхакова)

-Ҡыш көнө төндәр айырыуса һыуыҡ була, һыуыҡ бөтә ергә үтеп инә. Ҡайҙа ниндәй һыу бар барыһында туңдыра, йылға, күлдәрҙә конькиҙа йөрөргә, сәкән һуғышып уйнарға ла мөмкинлектәр

тыуа.

**Күҙәтеү № 8**

**Урам һепереүсенең хеҙмәтен күҙәтеү.**

**Маҡсат:-** урам һепереүсенең хеҙмәте менән таныштырыуҙы дауам итеү, бөхтәлек һәм таҙалыҡҡа ынтылыш тәрбиәләү, тәбиғәткә ыңғай ҡараш тәрбиәләү.

**Эш барышы:**

- Был ағай ниндәй эштәр башҡара?

- Уға ниндәй эш ҡоралдары кәрәк?

- Ҡыш көнө ул ағастарға нисек ярҙам итә ала?

**Хеҙмәт:** Ҡурсаҡтарға ҡар тауы яһайбыҙ.

**Хәрәкәтле уйындар:** "Һыуыҡ менән һалҡын бабай", "Беҙ күңелле шат балалар" - уйындың ҡағиҙәләрен боҙмай уйнау, һүҙҙәрен аңлайышлы итеп әйтеү.

**Уйын – күнегеү:** саңғыла йөрөү күнекмәләрен үткәреү - ҡалҡыулыҡтан өйөп төшөргә булышлыҡ итеү.

**Күҙәтеү № 9**

**Турғайҙарҙы күҙәтеү.**

**Маҡсат:** Ҡоштарға ҡарата ҡыҙыҡһыныуҙарын арттырыу. Турғайҙарҙың күп төрлө булыуын, уларҙың төҫө, ҡылыҡтары менән айырылып тороуын аңларға булышлыҡ итеү, уларға ҡарата хәстәрлекле ҡараш тәрбиәләү.

**Эш барышы:**

Сәпсек, сәпсек кил бында

Һыйланып ал ҡулымда.

Ҡурҡма ҡурҡма ҡошҡайым,

Ярма тулы усҡайым. (Г.Юнысова)

Тышта һыуыҡ. Ҡырҡ градус

Өшөп бөткән турғайҙар.

Йылынырға тип ахыры ,

Һарай эсенә тулғандар.

Эй, ҡошҡайҙар, матурҡайҙар.

Әйҙә, шулай эшләйек;

Яҙ еткәнсе беҙҙең өйҙә

Бергәләшеп йәшәйек! (Н.Сәлимов)

- Был ҡош нисек атала? Ул нимә менән туҡлана? Улар тәбиғәткә ниндәй файҙа килтерәләр? Кешеләр турғайҙар тураһында ҡыш көнө хәстәрлек күрәме?

- Доньяла 300-гә яҡын турғай төрө һанала. Улар берәмләп

йәшәмәй, ә туптарға йыйылып осоп йөрөйҙәр. Йәй көнө улар

бөжәктәр менән туҡланалар. Көҙ бешкән бойҙай ,арыш ашап

ауыл хужапығына зыян да килтерәләр.

**Хеҙмәт:** Юлдарҙы ҡарҙан таҙартыу - көрәк менән эш итеүҙә күнектереү.

**Хәрәкәтле уйын “Буяуҙар”** - уйындың ҡағиҙәләрен боҙмай уйнарға күнектереү, диалог үҫтереүгә булышлыҡ итеү.

Уйын – күнегеү - урындан алыҫлыҡҡа һикереүҙә күнектереү.

**Күҙәтеү № 10**

**Йәмәғәт транспортын күҙәтеү.**

**Маҡсат:** Йәмғиәт транспорты тураһында белешмә биреү.

Өлкәндәр хеҙмәте менән ҡыҙыҡһындырыу. Иртә профессиональ һөнәри йүнәлеш алып барыу.

**Эш барышы**: